## *Нажиә ИГЕҘЙӘНОВА*

*Билдәле яҙыусы Нажиә Игеҙйәнова үҙенең уҡыусыларын тормош дөрөҫлөгө, заман һулышы менән һуғарлыған әҫәрҙәре менән ҡыуандырып тора. 1999 йылда әҙибәнең беҙҙең журналда сыҡҡан «Йонсоу миҙгел» әҫәре уҡыусыларыбыҙ күңеленә хуш килде. Журналдың был һанында беҙ авторҙың өр-яңы ижад емешен — йәшлектәре һуғыш осорона тура килгән егет һәм ҡыҙҙың яҙмышын тасуирлаған хикәйәһен тәҡдим итеп, журнал уҡыусыларын ҡатын-ҡыҙ прозаһына ғына хас нескә кисерештәр донъяһына саҡырабыҙ. Хикәйә геройняһы Миңһылыуҙың бер генә тапҡыр күргән егетенә ғүмер буйы тоғролоҡ һаҡлауы бөгөнгө заман йәштәрендә бәлки: «Тормошта шулай ҙа буламы икән ни ул?!» — тигән һорау ҙа тыуҙырыр. Ә өлкән йәштәге журнал уҡыусылар, улар хаҡында уҡығас, Миңһылыу менән Тамьян яҙмышына оҡшаш әллә күпме тарихты иҫенә төшөрөр...*




Оҙон юлдан талсыҡҡан Тамьян ағай концертты йүнләп ҡарай алманы. Йәш сағында гармунда үҙе бик яратып уйнаған «Шахта» көйөн мандолинала уйнауҙарын да урыҡ-һурыҡ ҡына тыңланы. Алҡыштар тынғас, мандолинасы яңы көй башланы. Күҙ ҡабаҡтарын күтәрә алмайынса йоҡо менән көрәшеп интеккән сал сәсле, олпат һуғыш ветеранын ошо көй ҡапыл һиҫкәндерҙе. Минут эсендә йоҡоһо ҡасты, асалаҡ-йомалаҡ күҙҙәре ҙурайып китте. Мандолинасыны һәйбәтерәк күрергә тырышып, йәһәт кенә турайып ултырҙы ла сәхнәгә текәлде. Ыҡсым ғына кәүҙәле, оло йәштәге апай йөрәктәргә үтерлек итеп мандолинала уйнай. Тамьян ағай уға йотор-ҙай итеп ҡараны: «Был ни ғәләмәт? Минең көйөмдө... тик үҙем генә уйнаған көйҙө тағы кем белә? Онотоп бөткәйнем дә был көйҙө...»

— Йәштәр һымаҡ ниңә йыбырланың да киттең? Тыңларға бирмәйһең! — Эргәһендә ултырған ҡарт Тамьян ағайҙың бөйөрөнә төрттө.

— Шәп уйнай бит! Кем ул? — Тамьян ағай тынысланырлыҡ хәлдә түгел, мандолинасыға арбалып, алғараҡ ынтылды.

— Беҙ егет саҡтарҙа мандолина модала ине. Хәҙер бик һирәк уйнайҙар бит шуны. Мин үҙем скрипка яратам. Һуғышҡа тиклем...

— Кем уйнай, тим? Исемен ишетмәй ҡалдым. — Тамьян ағай иркенләп хәбәр башлаған ҡартты бүлдерҙе.

— Мин дә ишетмәнем. Көй яҙыусылар харап күбәйҙе бит. — Ҡолаҡҡа ҡатыраҡ ҡарт тамашасы залында ултырыуын оноттомо, әллә хәбәрен тыңларға кеше барлығына һөйөндөмө, тыуышын көрәйтеп ебәрҙе.

Сал сәсле ветеран уның нимә хаҡында һөйләгәнен ишетмәне шикелле, күҙҙәрен сәхнәнән алмай ултырҙы-ултырҙы ла кинәт аяғүрә баҫты:

— Миңһылыу?!

Тамашасылар гөүләргә тотондо:

— Сәстәре ағарып бөткән, балаға һымаҡ ҡыланасы...

— Эскәндер ул, иҫеректер...

Тамьян ағай береһенең дә һүҙенә иғтибар итмәне, күҙҙәрен мандолинасынан алмай баҫып тороуын белде. Шунан, икеләнгәндәй, ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына бер-ике аҙым яһаны, унан үтә лә ҡабаланып, сәхнәгә күтәрелде.

Тамьян ағайҙың ялбарыулы тауышын апай ҙа ишетте. Ихлас, мөкиббән уйнап ултырған еренән ҡапыл туҡтаны. Кинәт туҡтауҙан мандолина ҡылдарына медиатор ҡатыраҡ ҡағылды, тирә-яҡҡа сың-ң иткән иңрәүле ауаз таратты. Кешеләр ҙә һағайҙы. Залда себен осһа ла ишетерлек тынлыҡ урынлашты.

Апай яй ғына урынынан торҙо, тартып алыуҙарынан ҡурҡҡандай, мандолинаһын күкрәгенә ҡыҫып, ҡымшанмай ҙа сәхнәгә күтәрелеүсене күҙәтте. Кинәт төҫө үҙгәрҙе, ағарынып китте, йәһәт кенә сәхнә артына йүнәлде. Әммә сығып китергә өлгөрмәне, алдына Тамьян ағай килеп баҫты:

— Һылыу! Миңһылыу!

— Тамьян?! — Быныһы ирендәрен саҡ ҡыбырлатып шыбырланы. — Һине күрер көндәрем дә бар икән! — Күрешергә һонолған ҡулдарға илтифат итмәне, ҡабаланып сәхнә артына сыҡты. Тамьян ағай уға бер аҙ ҡарап торҙо ла, иҫенә килеп, артынан эйәрҙе.

Был хәл залдағалырға оҡшаманы:

— Өркөттө бит, өркөттө! — Тамьян ағай менән әңгәмәләшкән әлеге ҡарт сабырлығын юйып, тирә-яғына ҡаранды.

— Бынауы бәндә кем булды икән?

— Еңеү байрамын үткәрешергә ярҙамлашҡан спонсор! Фермер хужалығының рәйесе ти. Беҙҙең пансионатҡа аҙыҡ-түлек килтергән ул! — Кемдер Тамьян ағайҙы маҡтаны.

— Әбейе ниңә шул ҡәҙәре шөрләне икән? Бабайҙан ҡурҡҡан әбейҙәр ҙә бармы ни? Юҡҡа түгелдер, юҡҡа түгелдер... — Бер мөрәүәтһеҙе көлөп ебәрҙе.

... Концерт дауам итте.

* * *

1943 йылдың ҡара көҙө. Һыуыҡ бүлмәлә ҡорама юрған ябынып, бөршәйеп кенә ятҡан Миңһылыу янында әхирәте бөтөрөлә:

— Йә,тор инде, тор, тансаға барайыҡ! Бармаһаҡ, тағы әрләнербеҙ! — Фаягөл түшәктән айырылғыһы килмәгән ҡыҙҙың өҫтөнән юрғанын һыпырып алды. — Теге көндә лә Алевтина Артемовнанан ныҡ эләкте, артыбыҙҙан эйәреп әрләне бит, оноттоңмо әллә?

— Өшөнөм! — Миңһылыу юрғанына йәнә уранды. — Саҡ ҡына йылына башлағайным. Уф, ошо Алевтинаның үҙәккә үтеүҙәре! Өр-яңы хәрби форма кейгән егеттәр менән сабаталы ҡыҙҙарҙың бейеүе уға бик оҡшаймы икән әллә?

— Мин дә шулай уйлайым. Үҙе сабата кеймәгәс, беҙҙең хәлде аңламай шул. — Фаягөл Алевтина булып ҡыланып, тауышын үҙгәртеп, ҡулдарын һелкә-һелкә һөйләнергә тотондо. — Һеҙ егеттәрҙе алыштырған ҡыйыу ҡыҙҙар, йәғни һеҙ — «тимер атты» йүгәнләйәсәк дан ҡыҙҙар, буласаҡ трактористкалар! — Шулай һөйләнде-һөйләнде лә, асыуын баҫырғалыр инде, йоҙроҡлап стенаға һуҡты.

Нимәлер «доңҡ» итеп ҡалды, стенала ҡапыл олоғара ярыҡ хасил булды. Минут эсендә стена шауҙырлап ҡойолдо ла төштө. Ҡыҙҙар ҡурҡыуҙан сарылдашып, өңрәйгән ергә ҡарап шаҡ ҡатты. Тәүләп Фаягөл иҫенә килде. Саң-туҙан баҫылғанын да көтмәне, штукатур киҫәктәре араһынан йоҡа ғына дүрткел таҡта тартып сығарҙы. Баҡһаң, стена тигәндәре ике бүлмә араһындағы ишек булған. Ишекте ошо таҡта менән генә көпләгәндәр ҙә, өҫтөн һылап, аҡлап ҡуйғандар.

— Хәҙер тансаға бармай мөмкин түгел! Алевтина быны күргәс, тағы талашыр, сәбәп кенә эҙләп йөрөй бит ул. Асыуын ҡабартмайыҡ, барайыҡ тансаға! Ана, күрше бүлмәләге ҡыҙҙарҙың береһе лә юҡ! — Фаягөл ярыҡтан күрше бүлмәгә ҡараны ла таҡтаны урынына ҡуйып аҙапланды. — Исмаһам, һыларға балсығы, аҡларға эзбизе лә юҡ бит. Ярар, иртәгә берәй йүнен табырбыҙ. Кейен тиҙерәк!

Миңһылыу мыштым ғына төҫө уңған ҡулдәген кейҙе, кәзә мамығынан үҙе бәйләгән кофтаһын яурынына һалды ла ҡулына сабатаһын алды.

— О-о! — тине Фаягөл, әхирәтенең яңы аяҡ кейемен күргәс. — Тағы икмәк карточкаңа алыштырҙыңмы?

— Алыштырмай ни хәл итәйем, тегеһе туҙҙы бит. — Миңһылыу, эш боҙған бала һымаҡ, Фаягөлгә мөлдөрәп ҡараны.

Фаягөл әйберҙе әйләндереп-әйләндереп тикшерергә тотондо.

— Еңел, башы ике иле генә — үҙе йоҡа, үҙе ныҡ. Сыуаш-мариҙар ҙа ярата татар сабатаһын! — Ҡыҙ «татар сабатаһын» тигәнгә баҫым яһаны.

— Шул булыр инде һинең. Һиңә татар яһаған әйберҙәр генә һәйбәт. — Миңһылыу сабатаны үлтереп маҡтаған Фаягөлгә һирпелеп ҡараны ла көлөп ебәрҙе.

— Әһә! Мине лә аңлай башланың! — Быныһы ла «пырх» итеп ҡалды.

Татар ҡыҙы Фаягөл Силәбе тракторҙар заводы янында асылған тракторсылар курсына уҡырға килгән ҡатын-ҡыҙ араһында үткерлеге менән айырыла ине: кәрәк саҡта арыу һүҙен таба, кәрәк икән — майһыҙ табала ҡыҙҙырырға ла күп һорамай. Һәләк

йүнсел дә: ашарға ризыҡ ҡалмағанда ла һис аптырамай бит ул. Ҡаланың хәлле бисәләренең ҡара эшен эшләргә лә йыбанмай. Яңыраҡ бер ҙур түрәнең ҡатынына фатир ағартҡайны, бәләкәй генә сеүәтә менән он биргәндәр. Һәр ваҡыттағыса бешеренгән саҡтарында ла ҡулы уйнап тора, теле һөйләп тора. Әлеге ондан ыумас бешергәндә лә теле телгә йоҡманы:

— Эх, Советская власть!

Көнгә ике ашыйбыз умач:

Берсен — иртән торгач,

Икенчесен — ачлыктан кузләр тонгач! — тип һамаҡлай.

Был таҡмаҡты Фаягөлдөң олатаһы сығарған икән. Октябрь түңкәрелешенә тиклем уның олатаһы сауҙагәр булған, хәлле генә йәшәгәндәр. Хәләл мөлкәтенән яҙған сауҙагәр үртәлгәндән сығарғандыр. Бала саҡта отоп алғанын Фаягөл һаман онотмай. Бындай таҡмаҡтар өсөн баштан һыйпамайҙар, ҡыҙ ҡыйын хәлдәргә тарырын да уйламай, Миңһылыуҙан һүҙ таралмаҫын белеп тә иркенләйҙер.

— Мондый ачы умачны ак бабамның этләре лә ашамас иде. Их, советская власть! — Фаягөл хәтәр хәбәрен шулай ослап ҡуя.

Ут кеүек Фаягөл менән баҫалҡы, оялсан Миңһылыуҙың холоҡ-фиғелдәре килеште, татыу йәшәйҙәр. Шаян Фаягөл Миңһылыуҙы үҙе һайланы:

— Әй! — тип ҡысҡырҙы ул бер көн дәрестәр тамамланып, ҡайтырға сыҡҡас. — Кил әле, Сылу! Син — озын балак, киндер ыштан, ябык күренсәң дә тыштан, таза кызга ошагансың. Әйдә, бергә яшибез! Миндә шундый потребность: һәр чак кемделер тәрбияләп кенә торасым килә. Әнкәйең юк монда, сине үзем саклап кына үстерим әле!

Шулай итеп, Миңһылыу һигеҙ ҡыҙ йәшәгән бүлмәнән ике карауат менән өҫтәл генә һыйған бүлмәһенә күсте. Фаягөл был бүлмәне ҡулына нисек төшөргәндер, Миңһылыу һорашып торманы. Һөйләр әле: ауыҙында һүҙ тормай, йөрәгендә сер ятмай бит уның. Үҙе һәләк дәртле бит әле: сабата кейгәнмен тип һис көйөнмәй, тансаға ашҡынып тора. Бына әле лә уҡыуҙан ҡайтҡас, өйҙән сығып йөрөргә яратмаған Миңһылыуҙы, старосталары Алевтина менән ҡурҡытаөркөтә, ҡала клубына барырға ҡыҫтауын белә. Фаягөлгә ҡыҙыҡтыр ҙа: зәңгәр күҙле, арыш көлтәһендәй һары сәсле ҡыҙға бигерәк тә урыҫ егеттәренең күҙе төшә. Ҡыйшандаҡ ҡыҙ һайлана, әле һаман дуҫлашҡан кешеһе юҡ.

— Аяғымда сабата тип, ваҡытынан алда ҡартайырғамы инде беҙгә? Һуғышҡа китәсәк егеттәрҙең күңелдәрен асайыҡ. Кем белә, әллә уларҙың ҡайһы береһе ҡыҙҙар менән һуңғы тапҡыр бейейҙер... Йә инде, Сылу, тиҙерәк бул инде!

Миңһылыуға буйһоноуҙан башҡа сара ҡалманы: йәһәт кенә урынын йыйыштырҙы ла сәстәрен уртаға ярып үрҙе, толом остарына ҡыҙыл таҫма таҡты.

— О-о! Комсомолка шулай ҡыҙыл таҫмалар менән генә ишергә тейеш сәстәрен! — Теләгенә ирешкән Фаягөл Миңһылыуҙың һалпы яғына һалам ҡыстырҙы.

— Эй-й, һинең шул булыр инде... — Быныһы йылмайған булды. Ҡыҙҙар ҡала үҙәгендәге клубҡа йүнәлде. Ишек төбөндә һағауылда торған ҡырыҫ Алевтина, уларҙы күргәс, һуңлауҙарына йәне көйөп, башын сайҡаны.

Бейеүҙәр туҡтаған мәлгә тура килделәр. Бейеү ҡыҙған саҡта керһәң, кеше күргәнсе ултыраһың да ҡуяһың. Был юлы ҡыҙҙар уңайһыҙ хәлгә ҡалды: барыһының да күҙҙәре уларҙа. Миңһылыу электр шәмдәренә күҙҙәре сағылыуға, унан да бигерәк бөтәһенең дә иғтибар итеүенә оялып, баҫҡан ерендә тапанды. Сығып ҡына китер ине, ишектең теге яғында уҫал Алевтина тора, түрҙә буш урындар бар, үтергә ҡыйыулығы етмәй. Ә Фаягөл күп уйлап торманы, текә баҫып түргә уҙҙы.

Ғәҙәттә патефон уйната торғайнылар. Был юлы гармунға бейейҙәр икән. Гармунсылары — ҡалын ҡара ҡашлы, мөләйем ҡарашлы егет, ишектән кергән ҡыҙҙың хәлен аңланымы, әллә ҡулдары ял иткәйнеме, бик дәртләнеп танго уйнап ебәрҙе. Курсанттар күҙҙәре төшкән, күнелдәре тартҡан ҡыҙҙар янына ашыҡты.

Залда ҡала ҡыҙҙары ла байтаҡ. Өҫбаштарының бөтөнөрәк, ыҫпайыраҡ булыуы менән айырылған ҡыҙҙар һис тартынмай, егеттәрҙең саҡырыуын көтөп кенә тора. Күбеһе сәстәрен ҡиҫтереп бөҙрәләткән. Бөҙрәкәй баштарын юғары сөйөп, тымыҡ күлдә йөҙгән аҡҡоштар кеүек, еңел, иркен өйөрөләләр. Миңһылыу уларҙы һоҡланып та, әҙерәк көнләшеберәк тә күҙәтә. Үҙенең тыуған ауылында күмәк уйындарҙа бик теләп, бик ихлас ҡатнаша ул. Тик уларҙа егет менән ҡыҙ ҡосаҡлашҡан

һымаҡ, бер-береһенә тотоношоп өйөрөлмәй, йә күмәкләшеп, йә яңғыҙ ғына бейейҙәр.

Сая кеше ҡайҙа ла сая инде: Фаягөл дә һары сәсле, оҙон курсант менән уртаға төшөп китте.

Бөгөн ҡыҙҙарға ҡытлыҡ икән: Миңһылыу янына бер юлы ике егет тып итеп килеп тә баҫты. Ҡайҙа ти ул тансаға төшөү, бурҙаттай ҡыҙарған ҡыҙ артҡа сигенде.

Гармунсы егет тә ҡаранан килешле, һөйкөмлө Миңһылыуҙы «сәпкә» алғайны. Ул Миңһылыуҙың парлы бейеүҙәрҙе белмәүен дә, баҙнатһыҙлығын да төшөнгәндер, кинәт кенә мосолман көйҙәренә күсте. Таныш көйҙәрҙе ишеткәс, ҡыҙҙың сырайҙары яҡтырҙы, үҙе лә һиҙмәҫтән гармунсыға тура ҡараны. Ә уныһы Миңһылыуға төбәлгәйне. Егеттең һынамсыл, әммә йылы ҡарашын күргәс, ҡыҙҙың йөрәге әллә алҡымына һикерҙе, әллә табанына төштө... Тартыныуҙан былай ҙа саҡ торған Миңһылыу ишеккә томоролдо.

Һалҡын һауа тынысландыра икән: бер аҙҙан ул тынын иркенерәк алды, фонарҙарҙың һүрән яҡтыһында тәүге ҡар бөрсөктәрен күҙәтә-күҙәтә ашыҡмай ғына атланы. Ҡапыл Фаягөл иҫенә төштө: әллә күктә, әллә ерҙә булғас ни, әхирәтен онотоп ебәргәйне: «Минең сығып киткәнемде күргәндер, үҙе лә ҡайтыр әле, йоҡлап китһәм, асҡысы ла бар. Иртәгә иртәрәк торормон. Карбюратор тигәндәрен аңлап етмәйем, боҙолһа, шуны нимә эшләтергә икән, уҡытыусынан ҡабат һорарға кәрәк...» — Миңһылыу трактор хаҡында ғына уйларға тырышһа ла, гармунсының яғымлы ҡарашы, һөйкөмлө йөҙө күҙ алдынан китмәне. Әлегәсә мөхәббәт тойғоһон татымаған күңеле, күҙгә күренмәгән сихри нур һымаҡ, егеткә тартылғанын аңлаған ҡыҙҙың күҙҙәренә йәш эркелде: «Сабата кейгән бахыр ҡыҙ...» — тигәндер. Исмаһам, Алевтинаныҡы кеүек ботинкам булһа, был тиклем байғош хәлендә ҡалмаҫ инем...» — тип әсенде.

Шундай хәсрәтле уйҙарға сумып барғанда ҡапыл «цыҡ-цыҡ» иткән итек тауышы ишетелде. Ҡаланың ошо ерендә яҫы таш йәйелгән, итек тауышы әллә ҡайҙарға яңғырай. Миңһылыу, артына боролоп ҡарарға ҡурҡып, аҙымдарын шәбәйтте: итектәрҙең эйәһе «Ул» икәнен күңеле һиҙгәйне.

— Һылыу! — тинеләр.

Миңһылыу йәлп итеп боролоп ҡараны. Гармунын ҡултығына ҡыҫтырған курсант йылмайып тора. — Беймәнегеҙ ҙә... Бәлиғ булғанһығыҙ, йоҡларға иртәрәк бит. — Егет шелтәләгән һымағыраҡ әйтеп ҡуйҙы.

— Иртәгә дәрескә шул. — Ҡыҙ шунан башҡа һүҙ тапманы.

Миңһылыу егеттең үҙе артынан килеүенә шатланды ла, аптыраны ла: «Ниңә арыуыраҡ кейемле ҡала сибәрен түгел, уны, сабаталы ауыл ҡыҙын һайлаған?» — Ҡыуаныуҙан, ҡаушауҙан, оялыуҙан — хистәр өйөрмәһенән — йөрәге тибеүҙән туҡтағандай булды.

— Оҙаҡламай беҙгә лә фронтҡа. Приказ ғына көтәбеҙ. Ҡайһы районданһың, һылыу? — Гармунсы йәһәт кенә «һеҙҙән» «һингә» күсте.

Ауыл балаһылыр, ауылда «һеҙләп» тормайҙар.

Миңһылыу әйтергәме, юҡмы, тип икеләнде. Икеләнеүен еңде йәш йөрәк, шым ғына районын әйтте.

— Беребеҙ Башҡортостандың көнсығышынан, беребеҙ көнбайыштарынан! — Егет йор һүҙле, уйынсаҡ — ауыҙы ҡолағына еткән. — Шулай бит, һылыу?

— Әллә Фаягөлдө беләһеңме, исемемде ул әйттеме? — Гармунсының ябайлығы, алсаҡлығы ҡыҙҙы батырайтып ебәрҙе, егеткә күтәрелеп ҡараны.

— Бер кем дә бер нимә лә әйтмәне. Исемең һылыумы ни? — Быныһы, ғәжәпләнеп, ҡалын ҡаштарын сөйҙө.

— Миңһылыу минең исемем. Әсәйем дә Һылыу ти ҙә ҡуя ине, бында Фаягөл тулыһынса әйтергә йыбанып, Һылыу тисе...

— Ҡыҙыҡ икән... Беҙҙең яҡтарҙа үҙеңдән кесе ҡатын-ҡыҙға һылыу тиҙәр.

— Һы-ы... Ә беҙҙә иркәм тип әйтәләр.

Икеһе лә көлөп ебәрҙе.

«Тауышы ла, көлөүе лә бик матур, һәйбәт йырлайҙыр», — Миңһылыу эстән шулай уйланы.

— Иркәм, иркәләмәйһең... — Егеттең күҙҙәре осҡонланып китте. — Һеҙҙә наҙлыраҡ әйтәләр икән шул. Ә Фаягөл кем?

— Курста бергә уҡыйбыҙ, бер бүлмәлә йәшәйбеҙ.

Уғаса ятаҡҡа килеп еттеләр. Ҡыҙ тәҙрәгә ҡараны ла шып туҡтаны: шәмде һүндереп киткәйнеләр ҙә, әле бүлмәлә ут бар. Тимәк, Фаягөл унан алдараҡ ҡайтҡан. Туранан һыпыртҡандыр ул, ут ҡыҙ.

Ишек эстән эленмәгәйне. Әллә яңғыҙы түгелме Фаягөл? Бер үҙе генә булғанда ишекте бикләп кенә тора ул.

Ысынлап та, өҫтәл артында бая Фаягөл менән бейегән һары егет ултыра ине.

Ишектән кереүселәрҙе күргәс, курсант аяғүрә баҫты ла телен шартлатты:

— Атабаев?! Һин дә ҡыҙҙар оҙата башланыңмы? Бына һиңә суфый! — Ирмәк кенә көлдө лә Миңһылыуға боролдо. — Михаил Алексеев булам!

— Атабаев Тамьян үҙе! — тигән булды гармунсы, Фаягөлгә честь биреп.

— О-о, Сылу, егетнең ата байын эләктергәнһең! — Телсәр ҡыҙ, гәҙәтенсә, һүҙҙе кеҫәнән эҙләмәне.

Ҡайҙа йәштәр — шунда шаян һүҙ, уйын-көлкө — геүләшеп көлөштөләр.

Фаягөл сәй эсергә саҡырҙы. Өҫтәлдә галет, йоҡа ғына теленгән икмәк, ваҡ ҡына киҫәктәргә бүленгән шәкәр. Хатта ит консерваһы ла асҡандар — батшалар өҫтәле лә был ҡәҙәре бай булмаҫ. «Михаил килтергән күстәнәсме, әллә һаҡсыл Фаягөлдөң «тейелмәҫ запасымы»?..» — Миңһылыу егәрле әхирәтенә һоҡланып ҡараны.

Ҡабаланмай ғына эстеләр сәйҙе. Баҡһаң, Михаил саф урыҫ түгел, суҡындырылған татар. «Суфый» тигән һүҙҙе белеүенә, татарса яҡшы һөйләшеүенә Миңһылыу аптырағайны, эш бына ниҙә икән! Ике татар килеште: Фаягөл менән Михаил береһенән-береһе уҙҙырып, көләмәстәр һөйләп кинәндерҙе.

— Ата бай, беҙ фәҡирҙәрҙең күңелен ас әле! — Фаягөл, рөхсәт һорап торманы, гармунды Тамьяндың тубығына килтереп һалды. Тамьян ниңәлер Миңһылыуға ҡараны. Ҡап-ҡара күҙҙәр, нурлы күҙҙәр егеткә төбәлгәйне. Тамьяндың йөҙө яҡтырып, ауыҙы йырылды: гармунын йәһәт кенә ҡулына алды ла тиҙ генә ҡайыштарын кейҙе, бармаҡ остары менән төймәләренә етеҙ генә баҫып сыҡҡас, күреген кирә тартып «Шахта» көйөн уйнап ебәрҙе. Фаягөл йыр башланы:

Китә ҡаҙҙар, китә ҡаҙҙар,
Китә ҡаҙҙар Донбасҡа.
Мин дә уйлап торам әле.
Шул ҡаҙҙарҙан ҡалмаҫҡа!

Йырға башҡалар ҙа ҡушылды. Ә Тамьяндың тауышы, ысынлап та, моңло ине, дөрөҫ уйлаған Миңһылыу.

Йыр тамамланғас, Михаил менән Фаягөл тәҙрә янына күсте, мөңгөр-мөңгөр һөйләшергә тотондолар.

Бер аҙҙан Тамьян Миңһылыу ғүмерҙә ишетмәгән ят көй уйнап ебәрҙе.

— Һеҙҙең яҡтың ғына көйөлөр, бер ҙә ишеткәнем юҡ ине? — Тантаналы ла, һағышлы ла көйҙө тын да алмай тыңлап ултырған ҡыҙ гармунсыға ғәжәпләнеп ҡараны.

— Оҡшаймы? — Егет Миңһылыуға үҙ итеп, яҡын итеп ҡараны.

— Бик оҡшай! — Быныһы үҙе лә һиҙмәҫтән, гармунды һыйпап алды.

— Үҙем сығарған көй был! Әлегә һүҙҙәре юҡ. — Егет бер аҙ уйланып ултырҙы ла тәүәккәл генә әйтеп ҡуйҙы. — Мин фронттан ҡайтҡансы һүҙҙәрен уйлап тап, йәме, һылыу... Миңһылыу...

— Һы-ы, һин сығарҙыңмы? — Сихри көйгә әҫәрләнгән ҡыҙ Тамьяндың үтенесен ишетмәнеме, әллә ниндәй яуап ҡайтарырға белмәнеме, үҙе һорау бирҙе.

— Бөгөнгә тиклем минеке генә ине, хәҙер икебеҙҙеке булыр... Һуғыштан ҡайтҡас, мин уйнармын, һин йырлаһың! — Егет ихлас йылмайып хәбәрен дауам итте — Мин дә тракторист бит. Военкоматта тракторист икәнемде белгәс, һорап та торманылар, танкистар курсына ебәрҙеләр. Беҙ бер һөнәр кешеләре, моңдаш та булырбыҙ. Мәңгегә! Шулай бит?

Көтмәгәндә һүҙҙәре өҙөлдө.

— Их, ҡыҙҙар, беҙҙең ваҡыт бөттө, әйҙә, Атабаев! Ҡыҙҙар, алтындар, яңынан күрешкәнгә тиклем һау булығыҙ! Тыныс йоҡо! Төшөгөҙҙә беҙҙе күрергә яҙһын! — Михаил ҡабаланып ишеккә йүнәлде.

Тамьян сығып китергә ашыҡманы, ишек төбөндә аяҡтарын алмаштилмәш баҫып торҙо-торҙо ла Миңһылыуға мөлдөрәп ҡараны:

— Көн һайын приказ көтәбеҙ, кем белә, әллә бөгөн, әллә иртәгә оҙаталар. Беҙ тәғәйен ергә барып еткәнсе һинең уҡыуың тамамлана. Һылыу, адресыңда яҙып бирсе.

— Әлләсе... — Ҡаушаған Миңһылыу тирә-яғын байҡаны. — Ҡағыҙ ҙа юҡ.

— Беҙ һеҙҙең һымаҡ, ҡағыҙға яҙып, ҡағыҙға һыҙып уҡымайбыҙ шул. Күңелебеҙгә яҙабыҙ ҙа башыбыҙға һалабыҙ. — Фаягөл көлөп ебәрҙе.

Тамьян түш кеҫәһенән тәҫләп кенә бөкләнгән гәзит сығарҙы, уны әйләндереп-әйләндереп ҡараны ла, ситен тигеҙ генә йыртып, Миңһылыуға һондо:

— Яҙ шунда.

Ҡолаҡ остарына тиклем ҡыҙарған ҡыҙ тартынып ҡына гәзит киҫәгенә үрелде.

— Һылыуым, хаттарымды берүк яуапһыҙ ҡалдырма инде. Шуны бел, Миңһылыу: һинән башҡа хат яҙа торған кешем юҡ минең...

— Тиҙ бул! Ҡыҙҙар күргәс, донъяңды онота торған ғәҙәтеңде белмәй инем! — Михаил ишекте асып, иптәшен саҡырҙы.

Егеттәр сығып киткәс, бүлмәлә шомло тынлыҡ урынлашты. Ҡыҙҙар күңелһеҙләнде.

— Ата байыңа адресыңды биреп яҡшы иттең. Был ҡырағай адресын яҙмаç инде, тип ҡурҡҡайным. — Фаягөлдөң кәйефе юҡ, етдиләнеп киткән.

— Ә һин? — Миңһылыу бойоҡ әхирәтенә һағайып ҡына күҙ һалды.

— Оҡшағайны суҡынған! Бисәһе, балаһы бар икән. — Фаягөл тәрән көрһөндө. — Ә һин егеттең аçылына осраның: тракторист, танкист, гармонист! Үҙең дә сибәрһең, егетең дә дан. Пар килдегеҙ.

— Кем белә инде: пармы әллә зармы... Гитлерҙы еңеп, имен-аман ҡайтһындар, тип теләйек! — Миңһылыу ҙа әхирәте һымаҡ тәрән көрһөндө.

— Уйлап һөйлә: әллә зар булабыҙ, тиергә ярамай. Фәрештәнең амин тигән сағына тура килмәһен. Тфү-тфү, ундай яман уйҙарың елгә осһон! Иртәгә байрам түгел, йоҡлайыҡ.

Ҡыҙҙар һалҡын түшәктәренә сумды.

* * *

Миңһылыу менән Тамьян ни бары өс-дүрт көн генә осрашты, танкистарҙы фронтҡа оҙатырға фарман килде.

Перрон тулы халыҡ. Бал ҡорто күс айырамы ни: тирә-йүн геүләп тора: илашалар, йырлашалар, бейешеп тә маташалар.

Әйтерен әйтеп ҡалырға тырышыуылыр, Тамьян хәбәрен ҡабаланып һөйләй:

— Миңһылыуым, беҙ бик матур йәшәрбеҙ, бер-беребеҙҙе көнләшеп ыҙалатмабыҙ. Атайым арҡаһында, кәләшемде сәбәпһеҙгә көнләшмәçкә ант иттем. Әҡлимә һылыуым етен сәсле, күк күҙле ине. Атайым да, әсәйем дә, бүтән балалар ҙа ҡарасманбыҙ, арабыҙҙа бер Әҡлимә генә аҡ йөҙлө. Атайым уны тыуғас та яратманы, хатта беҙҙең һылыуыбыҙ менән уйнағаныбыҙҙы оҡшатмай ине. Әсәйем, бахыр, ғазаплана. Бармаҡтың ҡайһыһын тешләһәң дә ауыртa, тиҙәр, уға күк күҙле, һарыҡай ҡыҙы лы ғәзиз: атайымдың Әҡлимәне ҡағыуын күтәрә алмай, илай. Беҙ ҙә атайҙан ҡурҡабыҙ: бәләкәсебеҙгә яҡты йөҙ күрһәтмәйбеҙ. Биш кенә йәшлек ҡыҙыҡай беҙҙең мөнәсәбәтте аңлай: гел бер үҙе уйнай, һирәк көлә, һирәк илай. Илаһа йыуатыусы, көлһә ҡушылыусы юҡ.

Шулай бер көн атайымдың алыçтағы Рәйфә тигән туғаны ҡунаҡҡа килеп төштө. Күптән осрашмағандар. Күрешеп, хәл-әхүәл белешеп, бер аҙ тынысланғас, Рәйфә апай Әҡлимәгә текләп ҡарап ултырҙы-ултырҙы ла аһ итте:

— Атаҡ, был ҡыҙығыҙ Сәлимә еңгәйемдең күсермәһе лә! Собханалла, күҙем теймәһен, оҡшаһа ла оҡшар икән бала ҡартәсәһенә! Әй, еңгәйем үҙе генә күрә алманы шул ейәнсәрен. Миңә оҡшаған тип, һөйөнөстән әллә кем булып йөрөр ине! — Унығ күҙҙәре йәшләнде.

Бөтәбеҙ ҙә атайға ҡараныҡ. Тәүләп күрәме ни, ул да Әҡлимәгә төбәлеп, телһеҙ ҡалғайны. Атайҙың төçө үҙгәрҙе, ҡып-ҡыҙыл булды:

— Минән дә дүрәк кеше юҡтыр ул донъяла! Бәләкәсемдең әсәмә оҡшағанын күрмәçкә йә алйот, йә һуҡыр булырға кәрәк бит! — тип, хатта ҡаҡ маңлайына һуғып-һуғып алды.

Ҡәйнәһен бер тапҡыр ҙа күрмәгән әсәйем дә таң ҡалғайны. Килен булып төшкәндә ҡартәсәйем гүр эйәһе булған.

Атайым әсәйем менән Әҡлимә һылыуымды ҡосаҡлап иланы. Көнләшеп көн күрһәтмәгәненә әсәйемдән ғәфү үтенде. Ҡағындыҡ Әҡлимәбеҙ шул сәғәттән иң ҡәҙерле кешебеҙгә әйләнде. Атайым тубығына ултыртып һөйөр ине. Тик һылыуыбыҙ ғына үҙгәрмәне: аҙ һүҙле, бойоҡ бала булып ҡалды. Әле лә яңғыҙлыҡты ярата.

Икеһе лә эстән генә һағайып көткән фарман ҡапыл яңғыраны: танкистарға вагондарға ултырырға ҡуштылар. Ығы-зығы көсәйҙе. Тамьян ҡыйыр-ҡыймаç Миңһылыуға ынтылды. Унығ үбергә ниәтләүен төшөнгән ҡыҙҙың ҡото осто: был ҡәҙәре халыҡ алдында оялмайынса... Ҡара күҙҙәрен түңәрәкләндереп артҡа сигенгән Миңһылыуҙың хәлен егет тә аңланы: ҡыҙға һонолған ҡулдары һалынып төштө, ҡыҙарынды, ниҙер әйтергә теләне — тотлоҡто...

Поезд ҡуҙғалғас ҡына Миңһылыу төндәр буйы ултырып сиккән ҡулъяулығын кеçәһенән сығарҙы. Хәбәргә

албырғап, бүләген оноткайны. Ул арала поезд тәгәрмәстәре шәбәйгәйне инде. Составтың һуңғы вагоны күҙҙән юғалғансы Тамьянға бағышланған ҡулъяулыҡты болғап тороуҙан башҡа сара ҡалманы. «Вәғәҙәнең ихласлығын дәлилләп, егеттәр үҙҙәре үк ҡыҙҙарҙан ҡулъяулыҡ һорай, тип ишеткәнем. Оноттомо, уңайһыҙландымы, әллә улар яғында бындай ғәҙәт, ырым юҡмы, Тамьян ҡулъяулыҡ һораманы. Ярай, мамыҡ бирсәткә бәйләрмен дә ыҡсым ғына посылка һалырмын», — Миңһылыу шулай уйлап тынысланды.

* * *

Курстар тамамланғас, Миңһылыу ауылына осоп ҡайтты. Өс мөйөшлө һалдат хаттары уны күптән көтәлер кеүек ине. Әммә бер генә хат та килмәгәйне. «Яҙырға ваҡыты юҡтыр. Фронт алыҫ бит, хаттар оҙаҡ йөрөйҙөр», — Шундай уйҙар менән йыуанды. Әммә көн артынан көндәр үтте, хат тигәнең һаман килмәне.

— Көт, апай, килер ул хаттар, көт! — Сибек кенә почтальон ҡыҙыҡай ҙа осраған һайын әүрәткән, йыуатҡан була.

Көттө Миңһылыу, көн дә көттө һалдат хаттарын. Инде Силәбенән ҡайтҡанына ла хәтһеҙ ваҡыт үтте: йыл, йыл ярым: ике йыл... Ниһайәт, Еңеү байрамын да күрҙеләр, тик Тамьяндан ҡош телендәй генә лә хәбәр булманы. Ярай әле, күрше районда йәшәгән серҙәше, кәңәшсеһе Фаягөл әхирәте бар. Бер-береһенең хәл-әхүәлен белешеп торҙолар. Фаягөл дә хат һайын «Ата бай» хаҡында һораша торғайны, төңөлдө, ахырыһы, аҙаҡ исемен дә телгә алмаҫ булды.

Курстан ҡайтҡас, Миңһылыуҙы НАТИ-ға ултырттылар. Шул иҫке трактор менән дә нормаларын арттырып үтәне: ал-ял белмәне, көндө төнгә, төндө таңға ялғап ер һөрҙө, тырматты, иген сәсте, урҙы, һуҡты. Йөрәк ярһыуҙарын эш менән баҫырға тырышһа ла, һай, йәш күңел барыбер үҙенекен итте: аҙна тирәһе генә осрашҡан егетте һағына ине ул. Теге саҡта, перронда кешенән оялып үптермәгәненә үкенә. Әле булһамы, әле ул үҙе егетте ҡосаҡлап үбер ине, киң күкрәгенә башын ҡуйып, йөрәк тибешен тыңлай-тыңлай, иркәләнергә лә оялмаҫ ине. Ауыр эш менән дә баҫылмаған йөрәгенә баш була алмай, ялан тултырып йырлап ебәрә. Тамьяндың көйөнә йырлай. Көн һайын яңынан-яңы йыр тыуып ҡына тора. Тик уларҙы мәлендә яҙып барырға ваҡыт ҡына тапманы. Аҙағыраҡ яныу-көйөүҙәренә сыҙамаған, тәҡәтен ҡороткан һағыштарҙан ҡотола алмаған саҡтарында ҡулына мандолинаһын ала торған булды. Бәхетенә, йәрәхәтле йәненә дауа булырлыҡ әмәле табылды — Миңһылыу мандолина уйнарға өйрәнде...

* * *

Баҫыу эштәренән саҡ ҡына арынғайнылар. Булған ашлыҡты һуғып бөтөп, туңға һөрә башлағайнылар. Тик ошо арала НАТИ менән бигерәк интекте Миңһылыу. Һуғышҡа тиклем алынған нәмәнең ватылмаған көнө юҡ: бер ерен төҙәтеүгә икенсе урыны боҙола. Әле бына яғыулығы бөттө. Яғыулыҡ тигәне, исмаһам, кәрәсин дә түгел бит — шаҡмаҡлап ваҡланған ҡоро таптоп. Миңһылыу шуны күп итеп әҙерләй ҙә, сылатмаҫ өсөн өй соланында һаҡлай. Шуны тоҡҡа тултырып яланға алып китергә тип ҡайтып барыуы. Мәктәп эргәһенән үткәндә ишетте ул йырҙы. Ишетте лә шаҡ ҡатты: теге ваҡыт Силәбелә Тамьян уйнаған «Шахта» ине ул. Моңло ғына тауыш менән ҡатын-ҡыҙ мандолинаға ҡушылып йырлай:

Беҙ айырылдыҡ та һарғайҙыҡ,
Айырылмаһын башҡалар...

Миңһылыу өйөнә ҡайтып барыуын да, ҡырҙа ҡалдырған тракторын да онотто: «Беҙ айырылдыҡ та һарғайҙыҡ, һарғаймаһын башҡалар...» Йырҙы һағыштарҙан һарғайған кеше сығарғандыр. Эй алла, һөйгәнһөйөлгәндәр айырылмаһын ине шул был яҡты донъяла.

Барыһына ла һуғыш ғәйепле... Илгә ябырылған афәт арҡаһында танышты Миңһылыу менән Тамьян. Яу ҡупмаһа, Силәбегә уҡырға килерҙәр инеме лә, табышырҙар инеме. Эйе, ике йәш йөрәкте һуғыш осраштырҙы, һуғыш айырҙы...

Миңһылыу мәктәпкә бороладо. Йырмоң килгән бүлмәнең ишеген асһа, йәнә ғәжәп итте: йәш кенә ят ҡыҙ мөкиббән китеп мандолина ҡылдарын сиртә, үҙе моңло итеп йырлай. Ҡураныс ҡына ҡыҙҙа шул ҡәҙәре моң булыуына Миңһылыу һоҡланып ҡарап торҙо. Бер аҙ тыңлағас, тамаҡ ҡырҙы. Быныһы шунда ғына бүлмәлә кеше барлығын шәйләне.

— Иркәм, кем балаһы һин, танымайым? — Миңһылыу, тылсымсы янында торғандай, баҙнатһыҙ ғына һүҙ башланы.

— Һаумыһығыҙ! — Ҡыҙ аяғүрә баҫты, ихтирам менән сәләмләште. — Быйыл уҡытырға килдем. Ә мин һеҙҙе яҡшы беләм: районыбыҙҙың алдынғы тракторсыһы Миңһылыу апай Итҡолова булаһығыҙ!

— Ғәфү ит, иркәм, мәңге ҡыр-яландан ҡайтмағас, мәктәп хәлдәрен белмәйем шул. Дан уйнайһың мандолинала! Минең дә өйрәнгем килә. — Миңһылыу ипле һөйләшкән ҡыҙға кинәт асылып, ниәтен әйтте.

— Өйрәтәм, апай! — Уҡытыусы, ихлас йылмайып, мандолинаны шунда уҡ Миңһылыуға һондо.

Миңһылыу тимер-томор тотоп тупаҫланып, шырауланып бөткән ҡатҡыл ҡулдарына мандолинаны һаҡ ҡына алды: нәҙек кенә ҡылдары өҙөлөр, йылтыр корпусы сыйылыр һымаҡ. Шунан өҙөп-өҙөп кенә әйтеп ҡуйҙы. — Рәхмәт, иркәм, әле үҙең йырлағанса, һөйгән йәреңдән айырылма, бәхетле бул!

* * *

Тунға һөрөү тамамланғас, ике ҡыҙ кис ултырырға гәҙәтләнде. Йәш айырмалығы ла һиҙелмәне, һөнәрҙәренең төрлөлөгө лә беленмәне, серҙәре уртаҡ булды. Миңһылыуҙың отҡорлоғона, ныҡышлығына уҡытыусы ҡыҙҙың иҫе китте. Еңел көй тип, «Әпипә»не өйрәтә башлағайны, ғүмерҙә ҡулына мандолина тотмаған Миңһылыу бер көн эсендә бынамын итеп уйнарға өйрәнде лә ҡуйҙы. Хәҙер Миңһылыуға мандолина алырға кәрәк ине. Бәхеткә, уныһы ла тиҙ генә хәл ителде.

Һуғыш ғәрәсәте тамамланғас та күпмелер интекте әле ул ошо иҫке нәмә менән. Тракторын һүткәс кенә Миңһылыуға Силәбе ҡалаһында сыҡҡан ЧТЗ-ны бирҙеләр. Тракторҙы алып ҡайтырға район үҙәгенә Миңһылыуҙың үҙен ебәрҙеләр. Мандолина шунда осраны. Бәхеттең етенсе күгендә ине ул: ҡулында яңы трактор рычагы, янында — йәш сабый һымаҡ ҡат-ҡат төрөлгән мандолина. Насар юлда тракторын һикертмәҫкә тырышып, яй ғына барҙы. Ауылына ҡайтып еткәнсе әллә нисә туҡтап, төргәген тағатып ҡараны: мандолинаға зыян килмәгәнме?

Отоп алыуҙарынан ҡурҡып, Тамьяндың көйөн кеше аяғы һил булғас ҡына уйнаны. Хатта уҡытыусы ҡыҙға ла ишеттермәне. Был — Тамьян менән Миңһылыуҙың ғына көйө, уны бүтән бер кемдең дә уйнарға хаҡы юҡ. Көй — Миңһылыуҙың йөрәк сере. Ә серҙе, бигерәк тә йөрәк серен, башҡалар белергә тейеш түгел. Эсе бошҡан саҡтарҙа, һағыштарына түҙерлек саралары ҡалмағанда Тамьяндың көйөн туйғансы уйнаһа, янған йөрәгенә ял була, өмөтө яңыра.

Өмөтө барҙың өлөшө бар, тиҙәр. Нисәмә йылдар үтһә лә Миңһылыу Тамьяндың буй-һынын, ягымлы ҡарашын онота алманы. Бына ул хәҙер генә ҡупшы баҫып килеп инер һымаҡ... Өмөтө өҙөлөргә, егеттән тамам һүрелергә осраҡлы ваҡиға сәбәп булды.

Ҡатын-ҡыҙ үҙенең асылын мәңге юғалтмай икән: йылдар буйы тракторҙан төшмәгән Миңһылыу ҙа нескә хисле, зауыҡ белгән зат булып ҡалды. Ебәк күлдәк тектерҙе ул. Тамьян алдан хәбәр итмәй генә килеп төшһә, күлдәкте йәһәт кенә кейермен тип, элгескә элеп, ҡул осона ҡуйҙы. «Мине сабаталы итеп күҙ алдына килтерәләр Тамьян. Бына хәҙер күрһен!..» — Бейек үксәле туфлиҙарын кейеп, көҙгөнән ҡарап ҡыуанды. Тығыҙ балтырлы төҙ аяҡтарын аҡ туфлиҙар тағы ла матурайтып ебәрә. Резина итеккә (кирзаһын да кейҙе йыш ҡына) күнеккәс, дағалы туфлиҙа атларға өйрәнергә лә тура килде.

Ә бер көн тәҙрәгә ҡараһа, эй хоҙайым, Тамьян килә ята. Һуғыш бөткәнгә нисә йыл, өҫтөнән һалдат кейемен һаман һалмаған икән. Кейемгә ҡатлыҡ саҡ бит, галифе салбарын, гимнастеркаһын ылбырағансы кейгәндәр бер Тамьян ғынамы... Юҡсы, кейеме арыу күренә...

Миңһылыу күҙ асып йомғансы халатын сисеп, яңы күлдәген кейҙе, ҡолаҡ артына хушбуй һөрттө, сәстәрен төҙәтте. Ҡапҡа яғындағы тәҙрәгә ҡараһа, бәй, теге хәрби кейемле кеше уның өйөн үтеп киткән дә! Шулай булмай, Тамьян Миңһылыуҙың өйөн белмәй бит. Уҡтай тышҡа атылды ҡыҙ, киң итеп ел ҡапҡаһын асты. Уғаса теге һалдат Ғәттәр ҡарт менән күреште. Көлөшә-көлөшә һөйләшә былар: Ғәттәр ҡарт Тамьянды ҡайҙан белә икән? Әй аллам, Тамьян түгел дә был кеше. Был бит Ғәттәр ҡарттың ейәне Дамил даһа! Хеҙмәтен тултырып ҡайтып килеүе...

Күреп ҡалыуҙарынан ҡурҡҡан Миңһылыу өйгә нисек кергәнен дә

һиҙмәне. Күлдәген сисеп шкаф төбөнә йәшерҙе, туфлиҙарын һалырға ла онотоп, тыңламаған аяҡтарын һөйрәп, карауаты янына саҡ барып етте лә йөҙтүбән ҡапланды... Оҙаҡ һыҡтаны өмөттәре бөткән ҡыҙ. Илап арығас, көнө-төнө ыҙалатҡан сирҙән ҡапыл ҡотолғандай, күңеленә еңел булып китте. Шул көндән ул тәҙрәгә ҡарауын, кемделер Тамьянға оҡшатып тертләүен ташланы. Күл өҫтөнән таралған томандай, Тамьяндың йөҙ һыҙаттары, ҡиәфәте яйлап юйылды, ҡараштары онотолдо. Бары тик егеттең елле көйө генә ҡалды йөрәктә...

* * *

Миңһылыу апайҙың бәләкәй генә бүлмәһе күркәм: бөтә ерҙә бөхтәлек, һәр нәмә үҙ урынында, артыҡ бер әйбер юҡ. Тәҙрә тупһаларында зәғфран, әҙрәс, яран гөлдәре. Улар, яҙ етеүгә ҡыуанып, ҡотороп сәскә атҡан. Карауаттағы мендәрҙәргә ҡулдан бәйләнгән аҡ селтәр ябылған.

Тамьян ағай менән Миңһылыу апай шулай уҡ ҡулдан бәйләнгән апаҡ эскәтер ябылған өҫтәл артында һөйләшеп ултыра.

Миңһылыу апай батыр итеп күҙ алдына килтерә торғайны, шулай булып сыҡты ла: Тамьян ағай байрам хөрмәтенә орден-миҙалдарын таҡҡайны. Ветеран ныҡ әле: кәүҙәһен дә йәштәрсә тура тота, хәрәкәттәре лә йылдам. Илле йыл элек ыҫмалалай ҡара сәстәре генә бөртөгөнә тиклем ағарған. Ялбыр ҡаштарында көмөш ептәр күренә.

Тамьян ағай эстәгеһен һиҙҙермәҫкә тырышһа ла, зирәк апай уның көтөлмәгән осрашыуҙан шаңҡыуын белеп-күреп ултыра. Үҙенең дә хәле Тамьян ағайҙыҡынан кәм түгел: әммә «карт ҡыҙ» исемен күтәреп, ғәрлеген, кәмһенеүен кешегә күрһәтмәҫкә өйрәнгән апайға халәтен йәшереүе еңелерәк ине.

— Ҡарттар йортонда икенсе йыл йәшәйем. Элекке хеҙмәтемде иҫәпкә алалар: айырым бүлмә бирҙеләр. Заманалар ауыр булһа ла, һәйбәт ҡарайҙар. Ашау-эсеүгә хитланмайбыҙ, теләһәк, үҙебеҙ ҙә бешеренәбеҙ. Үҙебеҙҙең пенсиябыҙ үҙебеҙгә етә.

— Миңһылыу, мин һинең алда бөткөһөҙ ғәйеплемен. Ғәйеплемен дә, ғәйепһеҙмен дә... һөйләһәм дә ышанмаҫһың... — Бер аҙ һүҙһеҙ ултырғас, Тамьян ағай телгә килде.

— Улай ышанырлыҡ булмағас, һөйләмә, Тамьян. Кеше ышанмаҫ хәбәрҙе ысын булһа ла һөйләмә, тиҙәр. — Апайҙың саҡ ҡына ҡалтыранған тауышында күңел төпкөлөндәге рәнйеүе, үпкәһе сағылды.

Ағай быны бик яҡшы аңланы. Ошо үпкәле ауаз кинәт кенә көс өҫтәнеме, уның тауышы көрәйҙе:

— Һөйләргә кәрәк. Һөйләргә тейешмен. Юлда һинең адресыңды юғалттым бит мин. Былай булды. Үҙең күрҙең, адрес яҙылған гәзит киҫәген түш кеҫәмә һалдым. Аҙаҡ, таушалмаһын тип, кеҫәмдән алып вешмешогыма тыҡтым. Бер станцияла ҡайнар һыуға сыҡтым. Килеп инеүемә Михаил тәмәке борхотоп ултыра. «Бик тартҡы килде лә гәзитенде алдым, асыуланма», — ти. «Нисек?! — мин әйтәм. — Күрһәт әле!» Был адрес яҙылған гәзитте көйрәтә бит. Секунд эсендә ауыҙынан «кәзә тояғын» тартып алдым да һүндерә һалып тағатып ҡараным. Адрес яҙылған ере генә янғайны. И-их, Михаилға йән көйҙө, саҡ һелтәп ебәрмәнем үҙен. Мин дә йүләр инде, шуны ятлап алырға башым етмәгән. Районыңдың исеме генә иҫтә ҡалғайны. Бына шулай ҡайһы саҡта бәләкәй генә сәбәп тә яҙмышты буталдыра икән.

— Ғазапланма, Тамьян, тиле йәшлек менән вәғәҙә биргәнһең, ә тормош ығы-зығыһы онотторған. —Миңһылыу апай хәбәрҙе икенсе юҫыҡҡа борҙо. — Михаил имен-аманмы? Ҡатышып йәшәйһегеҙме?

— Польшала, Седльце ҡалаһы янында вафат булды. Силәбенән беҙҙе тура 1-се Белоруссия фронтына оҙаттылар. Мин — механик-водитель, Михаил — танк командиры. Беҙҙең «Т-34»-кә снаряд тейҙе, экипаждан бер үҙем ҡалдым. Һуғыш бөткәнсе ете тапҡыр яраландым, етеһендә лә еңелсә. Аҙыраҡ госпиталдә аунайым да тағы сафҡа баҫам. Шулай Берлинға барып еттем, рейхстагка флаг элгәндәрен үҙ күҙҙәрем менән күрҙем.

Армиянан ҡырҡ бишенсе йылдың көҙөндә ҡайттым. Ҡырҡ алтынсы йылда өйләндем. Ғүмерем буйы тракторҙан, комбайндан төшмәнем. Фәйрүзәм менән өс малай, ике ҡыҙ үҫтерҙек, башлы-күҙле иттек. Яңыраҡ ҡарсығым гүр эйәһе булып ҡуйҙы. Әле бына крәҫтиән фермер хужалығын етәкләйем, уландарыма, кейәүҙәргә үҙем белгәнде өйрәтәм. Иген, йәшелсә үҫтерәбеҙ, мал бағабыҙ. Былтыр үҙебеҙҙәге

балалар йортона ярҙам иткәйнек. Быйыл, Бөйөк Еңеүҙең илле биш йыллығына арнап, һеҙҙең пансионатҡа картуф, йәшелсә, он, ит килтерҙек. — Бер аҙҙан Тамьян ағай бөтә ҡыйыулығын йыйып һорашырға йөрьәт итте. — Миңһылыу, тормош иптәшең кем ине?

Һа-а-ай, күңел бит ул... Күңел, күрәһең, һинең йәшеңә ҡарамай: хәс тә йәш сағындағы һымаҡ, Миңһылыу апайҙың йөрәген һағыш ялманы:

— Ғаиләле булһам, бала-саға үҫтерһәм, бында ла ултырмаҫ инем... — Тынын өҙөп-өҙөп кенә яуап ҡайтарҙы.

— Ғүмер тигәнең күҙ асып йомғансы үтә лә китә икән. Ниңә оя ҡорорға тырышманың, Миңһылыу?

Миңһылыу апай Тамьян ағайға күҙҙәрен тултырып ҡараны:

— Әй, Тамьян... Иш табылмағанға яңғыҙ ҡалманым. Һуғыштан һуң, иратҡа ҡытлыҡ йылдарҙа ла мине һоратыусылар булды. Һиңә тиңе генә осраманы. Бер кемде лә тиңһенмәнем... — Миңһылыу апайҙың йөрәге, хәлһеҙ күбәләк ҡанат ҡаҡҡандай, елп-елп итте лә һүрелде. Янаһы янып, көйөрө көйөп бөткәнгәлер, тиҙ тынысланды.

Ә Тамьян ағай ашҡынып китте: ғәжәп итеп, һоҡланып та, аптырап та ҡараны ул Миңһылыу апайҙың олоғайһа ла элекке һөйкөмлөгө, һылыулығы һаҡланған йөҙөнә. Һалҡын тиргә батҡан маңлайын ҡулъяулығы менән һөрттө, тамағы кибеп киттеме, һыуыҡ сәйҙе бер тынала эсте лә шымып ҡалды. Шунан нимәнелер иҫенә төшөрөп, урынынан ҡалҡынды ла кире ултырҙы:

— Миңһылыу, минең көйгә йыр сығарҙыңмы?

— Күп сығарҙым мин йырҙы. Нисәмә йылдар гармун урынына тракторым тырылдауына ҡушылып һинең көйгә ҡыр-яландар яңғыратып йырланым. Тик, үҙең әйткәнсә, һиңә гармунда уйнарға, миңә йырларға насип булманы. Шулай... бергә йырлай алманыҡ...

— Исмаһам, береһен йырлап ишеттер? — Тамьян ағай Миңһылыу апайға ялыныслы ҡараны.

— Хәҙер ни... Ваҡытында йырламағас, онотоп та бөттөм инде...

— Адресыңды юғалтмаһам... — Кинәйәне аңланы Тамьян ағай.

— Ҡуйсы, оло башыңды бәсһеҙләп, аҡланма. Һиңә адрес кәрәкмәй ине. Исем-фамилиямды, районымды беләинең, мине табам тиһәң, шул да еткәйне. Стахановсы булдым. Күп йылдар тракторсылар бригадаһын етәкләнем. Мине беләләр ине. Гәзиттәр ҙә яҙҙы минең турала. Райсоветтан һорашһаң да, МТС-тағыларҙан белешһәң дә, әйтерҙәр ине. «Ата байыңды хәҙер эҙләп табам да алып киләм», — тип, бер мәл Фаяғөл ярһып та йөрөнө. Беҙ ниңәлер һине һуғыштан имен-аман ҡайтҡан, тип уйланыҡ. Күңелебеҙ һиҙгән.

— Фаяғөлдө тыңларға кәрәк ине.

— Ояҡа ҡалыр инек. Башҡорт ҡатын-ҡыҙының ир эҙләп йөрөгәнен ишеткәнем-күргәнем булманы. Эҙләп барһам, минән күңелең биҙер ине. Аңламаҫ та, һанламаҫ та инең. Башҡорттар шундай...

— Уныһы дөрөҫ! — Тамьян ағай көрһөндө. — Рәхмәт, һылыуым, үҙем онотҡан көйҙө онотмауыңа. Әгәр бөгөн шул көйҙө уйнамаһаң, мәңге лә танымаҫ инем, осрашмаҫ инек. Миңһылыу, йәмле йәй етте, ҡунаҡҡа алып ҡайтайым.

— Балаларың ни әйтер? Улар әсәйҙәренең рухына хыянат итмәҫ.

Шул саҡ ишек ҡаҡтылар. Урта буйлы, киң күкрәкле, ҡара ялбыр ҡашлы, һөйкөмлө ҡарашлы урта йәштәрҙәге ир килеп керҙе.

— Атай, һине эҙләп күҙ тондо ла! Ҡайтырға кәрәк. Юл оҙон, иртәрәк ҡуҙғалайыҡ. — Шунда ғына ул хужабикәне шәйләп, сәләм бирҙе. — Һаумыһығыҙ, апай!

— Арыумын әле. — Миңһылыу апай уға һынамсыл ҡараны. — Тамьян, улың тас ҡына үҙеңдең йәш сағың! — Уйламай һөйләгәненә сикһеҙ уңайһыҙланып, ҡулына электр сәйнүген алды. — Сәй эс, улым, хәҙер яңыртып ебәрәм.

— Рәхмәт, апай, беҙҙе ашханала ашаттылар. Бына атайҙы юғалттыҡ та. Ярай әле, ошонда ингәнен кемдер күргән.

Ошо мәлдә урамда машина сигналы ишетелде. Тамьян ағай тертләне, тәҙрәгә күҙ төшөрҙө, яй ғына урынынан ҡуҙғалды.

— Хуш, Миңһылыу! — Уң ҡулын йөрәк тәңгәленә ҡуйып, тағы низер әйтергә уйланы, әммә ҡыйманы.

— Хуш, Тамьян! — Миңһылыу апай уның аҙап ҡалғанын күрһә лә, күрмәгәнгә һалышып, ситкә боролдо.

Ишекте ябыр алдынан Тамьян ағай, үҙе онотоп бөткән көйҙө ишетергә теләгәндәй, стенала элеүле торған мандолинаға тағы бер боролоп ҡараны.